# Асыҡ дәрес 25.01.17

## Тема: Ғ. Сәдәмдең тормош юлы һәм ижады (1911 – 1939)

### «Бала» поэмаһы

Маҡсат: Ғ. Сәләмдең тормошон , ижадын өйрәнеү. «Бала» поэмаһын идея тематик йөкмәткеһен асыуҙа, поэманың ыңғай һәм кире геройҙарҙың идея-тематик йөгөн билдәләүҙә, поэманың йөкмәкеһен анализлауға уҡыусыларға ярҙам күрһәтеү; ,бәйләнәшле телмәр үҫтереү, ижади, логик һәм образлы фекерләү ҡәүәһен үҫтереү; бөгөнгө көндә лә актуаль яңғырған проблемаларҙы асыҡлау нигеҙендә ғаилә ҡороуға, бала бағыуға дөрөҫ ҡараш тәрбиәләү, ғаилә йылыһына ынтылыш тәрбиәләү.

Йыһаз: проектор,экран, ноутбук, портрет, плакат, хрестоматия, китаптар, дәреслек.

Дәрес барышы:

1) Ойоштороу
2) «Сәләм» йыры

-Һаумыһығыҙ уҡыусылар!

Хәйерле көн уҡыусылар!

Бөгөн безгә ҡунаҡта М. Аҡмулла исемдәге БГПУ ьашҡорт филология факультетының хөрмәтле абруйлы уҡытыусылары: Ғ.Г. һәм дә 4 курс студенттары. Әйҙәгеҙ уларҙы сәләмләйек!

- Хәйерле кән!
- Рәхмәт! Ултырығыҙ!
- Иғтибар экранға. (бер уҡыусы уҡый) Ким Әхмәтйәновтың һүҙҙәре. «Метеор!» Үҙ есеменең һуңғы атомына тиклем тирә-йүнгә яҡтылыҡ итеп сәсеүгә биргән метеор менән Сәләмдең иртә өҙөлгән ялҡынлы ижад ғүмере араһында, ысынлап та, ҙур оҡшашлыҡ бар. Шағир ҙа уҙенең бөтә йөрәк йылыһын һәм бөтә көсөн халҡыбыҙға, мәҙәниәтебеҙгәхеҙмәт бирҙе. «Быуаттарҙың һәр бер иртәһен йырға ҡушып йырлау» өсөн, кешеләргә күберәк поэтик нур өләшеп ҡалыу өсөн ул ащығып йәшәне. Үҙенең йөрәк түрендәге «ун ғүмергә бөтмәҫ

Йәшәү дәртен»  башҡорт халҡына мөмкин тиклем тулыраҡ файҙаланып ҡалырға тырышты».

- Был ююлдарҙың авторы һеҙгә танышмы(китаптарын күрһәтергә)?
- Ким Әхмәтйәнов. Ғ. Сәләмдең тормош юлын, ижадын өйрәнгән ғалим, тәнҡитсе, әҙәбиәт белгесе.
- Дөрөҫ. Тимәк кем тураһында фекер йөрөтөлә?
- Шағир Ғәлимов Сәләм хаҡында.
- Афарин!Үткән дәрестә һеҙгә өйгә эшенә Ғ. Сәләмдең тормош юлы  һәм ижады буйынса кластер схема йәки презинтация эшләргә ҡушылғайны. Әйҙәгеҙ өйгә эште тикшереп китәйек(уҡыусылар презентацияларҙы уҡыйҙар, яҡлайҙар)

-Ә хәҙер ихтибар экранға(экранда Р. Ғәрипов шиғыр юлдары.Әсә һәм бала слайды)

- Балдан татлы бала әсәгә,

Гәлдән наҙлы  бала әсәгә

Ауыҙ һыуҡайыла бал икән-

Йөрәк ярып сыҡҡан бала икән.

- Ошо шиғыр юлдарына асҡыс һүҙҙе табығыҙ.
- Бала һүҙе.
- Ғ. Сәләмдең ошо асҡыс һүҙ менән ниндәй уртаклыҡ бар?
- Бала поэмаһы бар.
- Тимәк бөгөнгө дәрестең темаһын нисек билдәләр инегеҙ?
- Ғ. Сәләмдең “Бала” поэмаһын өйрәнеү.
- Маҡсаттарын нисек билдәрәп инегеҙ?
- Ғ. Сәләмдең тормошон , ижадын өйрәнеү. «Бала» поэмаһын идея тематик йөкмәткеһен асыуҙа, поэманың ыңғай һәм кире геройҙарҙың идея-тематик йөгөн билдәләүҙә, поэманың йөкмәкеһен анализлауға уҡыусыларға ярҙам күрһәтеү; ,бәйләнәшле телмәр үҫтереү, ижади, логик һәм образлы фекерләү ҡәүәһен үҫтереү; бөгөнгө көндә лә актуаль яңғырған проблемаларҙы асыҡлау нигеҙендә ғаилә ҡороуға, бала бағыуға дөрөҫ ҡараш тәрбиәләү, ғаилә йылыһына ынтылыш тәрбиәләү.
- Афарин, уҡыусылар! Бик дөрөҫ төҙөгәнгеһеҙ, әҙәбиәт дәресе – ул хис-тойғолар дәресе. Шағир Ғ. Сәләмдең ижадын ҡоро факттарға ғына таянып йомғаҡлаһаҡ, дөрөҫ булмаҫ, әйҙәгеҙ, хистәр донъяһына иғтибар йүнәлтәйек.

- Шағир һүҙенә синквейн(француз һүҙе – фекерҙәрҙе анализлау, рефлексия)